**Һинең хазинаң ҡайҙа?**

Ҡыҙыҡмайым донъя байлығына мин,
Байлыҡ бит ул, ни бары бер айлыҡ.
Хоҙайҙан көндә һорайым һаулыҡ мин,
Сөнки һаулыҡ, ерҙә иң ҙур байлыҡ.

Аҡыл байлығы миңә, Һин бирХоҙайым,
Ҡомһоҙлоҡтан, ныҡ йыраҡ торорға.
Тыныслыҡ та бир Һин минең күңелемә,
Мәңге, изгеләр юлында булырға.

Хоҙайым нәфсемде өйрәт еңергә,
Насар уйҙар, башыма бер үк кермәһен.
Изгелектәр генә эшләргә күндер мине,
Яуызлыҡты минең күҙем күрмәһен.

Ололарға хөрмәт күрһәтергә өйрәт,
Изге Һүҙең булһын миңә таяныс.
Тәүбә итәм мин һәр бер ҡылған эшемә,
Ғүмерем аҙағында булмаһын өсөн аяныс.

Хазинаң ҡайҙа булһа, күңелең дә шунда,
Тип әйткән бит, Изге Яҙмала Хоҙай.
Бик күптәр байлыҡ артынан ҡыуып,
Тамуҡ утына табан, тырышып атлай.

Мин Хоҙай Һинән, артығын һорамайым,
Иҫәнлек бир миңә һәр иртәләрең таңында.
Алтындан да ҡимммәтерәк Изге Һүҙеңде,
Таратыр өсөн, халҡың араһында,

Эй Хоҙайым, биргәненә шөкөр итәм,
Ҡомһоҙлоҡтан бер үк, мине арала.
Күңелемә Һин, иман нуры һиптең.
Бары тик булһын именлек, беҙҙең арала.

Ҡаяларҙай ныҡлы, Хоҙай Һинең һөйөүең,
Шул булыр бәхетле, кем быны аңлай.
Елдәй наҙлы, балдай татлы Һинең һүҙең,
Уны бит алтынға һатып алып булмай.